***«Бейек осоштарға ҡанат ҡуйыр***
***Зәйнәб Биишева мәктәбе...»***

З.Биишеваның «Башҡорт теле» шиғырын өйрәнеү

***Кәримова Гөлнара Яхъя ҡыҙы,***
*Туймазы педагогия колледжының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы, Башҡортостан Республикаһының мәғариф алдынғыһы*

*З.Биишеваның «Башҡорт теле» шиғырын өйрәнеү буйынса дәрес башланғыс синыф уҡытыусыһы һөнәрен үҙләштереүсе студенттар менән ойошторолдо. Улар башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡыйҙар. Шиғыр* 1960 *йылда яҙылыуына ҡарамаҫтан, бөгөнгө йәмғиәтебеҙ тормошонда актуаллеген юғалтмай. Йәштәрҙә башҡорт телен өйрәнеүгә етди ҡараш тәрбиәләргә, туған телдең халҡыбыҙ тормошонда ҙур роль уйнауын күрһәтергә, телһөйәр һәм илһөйәр шағирә З.Биишеванан өлгө алырға булышлыҡ итә.*

*Шиғри әҫәрҙе өйрәнеү дәрестәрен төрлөсә ойошторорға мөмкин. Иң мөһиме - йәштәр шиғырҙың образлы теленән тәм табырға, унан хисләнергә, ләззәтләнергә өйрәнһен, уларҙың рухи донъяһын байытһын. Беҙ З.Биишеваның «Башҡорт теле» шиғырын өйрәнеү дәресендә ҙур иғтибарҙы тасуири уҡыуға бүлдек. Билдәле методист Аслаев Т.Х. былай тип яҙа: «Тасуири уҡыу - текста сағылдырған йөкмәтке образ күренештәрҙең характерлы үҙенсәлектәрен, авторҙың ваҡиға, күренештәргә ҡарашын асып, әҫәргә хас тойғо менән уҡыу күнекмәһе ул». Тимәк, тасуири уҡыу алдынан әҫәрҙең идея-тематик йокмәткеһен тикшереү, авторҙың тексҡа һалған фекерен аныҡ белеү, геройҙарҙы һәм уларҙың кисерештәрен дөрөҫ аңлау талап ителә. Шуға күрә дәрестең тәүге өлөшөндә беҙ шиғырҙың идея-тематик йөкмәткеһен тикшерҙек, авторҙың уй-кисерештәрен асыҡланыҡ, һүрәтләү саралары өҫтөндә эшләнек.*

*Икенсе этапта әҫәрҙең интонацияһы асыҡланды, баҫым, паузаларға айырым иғтибар бүленде, партитура төҙөлдө.*

*Өсөнсө этапта студенттарҙың шиғыр уҡыу күнекмәләрен үҫтереүгә бәйле эштәр ойошторолдо. Хор менән уҡыу, парҙар менән эшләү, аудиояҙма ҡулланыу ындай дәрестәргә йәнлелек өҫтәй. Башҡортостан Республикаһы Мәғарифы министрлығы тарафынан әҙерләнгән фонохрестоматиялар әҙәбиәт дәрестәре эффектлылығын арттырыуҙа ҙур роль уйнай.*

*050146 Башланғыс кластарҙа уҡытыу специальносы буйынса Федераль дәүләт белем биреү стандарттарында студенттарҙың белем һәм күнекмәләренә юғары талаптар ҡуйыла. Шулар араһында Башланғыс дөйөм белем биреү программалары буйынса уҡытыу тип аталған беренсе профессиональ модулдә тасуири уҡыу күнекмәһенә эйә булыу мөһим талаптарҙан һанала. Беҙҙеңсә, башҡорт теле дәрестәрендә алынған күнекмә уларҙың уҡытыусы һөнәрен уңышлы үҙләштереүгә булышлыҡ итәсәк.*

**Дәрес маҡсаты**: *Зәйнәб Биишеваның «Башҡорт теле» шиғырының идея-тематик йөкмәткеһен үҙләштереү; шиғырҙы тасуири уҡырға өйрәтеү; йәштәрҙә туған телде белеүҙең әһәмиәтен күрһәтеү; башҡорт теленә һөйөү тәрбиәләү.*

**Йыһазландырыу**: *З.Биишева портреты, китаптар күргәҙмәһе, компьютер, слайдтар.*

**Методтар**: *әңгәмә, уҡытыусы һөйләүе, тасуири уҡырға өйрәтеү методтары (өлгө нигеҙендә тасуири уҡыу, сағыштырып уҡыу, аудиояҙма тыңлау).*

**Ойоштороу формалары**: *фронталь, парҙар менән эшләү, индивидуаль эш.*

**Дәрес барышы:**

**Уҡытыусы**: Һаумыһығыҙ, ҡыҙҙар, егеттәр!

(*Таҡталағы эпиграфты уҡый)* Башҡорт халҡында «Туған телен ҡәҙерләгән халыҡ ҡәҙерле булыр» тигән мәҡәл йәшәп килә. Үткән дәрестә беҙ тел хаҡында һөйләштек, мәҡәлдәр өйрәндек. Шул мәҡәлдәрҙе иҫкә төшөрәйек һәм бөгөнгө дәрескә эпиграф итеп һайланған мәҡәлгә аңлатма биреп ҡарайыҡ.

**Студенттар:** (Мәҡәлдәрҙе иҫкә төшөрәләр). *Бөгөнгө мәҡәлдә туған телде ҡәҙерләргә кәрәк, шул ваҡытта һине лә хөрмәт итерҙәр тигән фекер еткерелә.*

**Уҡытыусы:** Телде ҡәҙерләү нимә була? Бының өсөн нимә эшләргә кәрәк?

**Студенттар**: Туған телдә һөйләшергә, уны онотмаҫҡа кәрәк.

**Уҡытыусы**: Дөрөҫ әйтәһегеҙ. Һәр халыҡ үҙенең телен ҡәҙерләгән, хөрмәт иткән. Быны беҙ мәҡәлдәрҙән дә уҡып белдек. Шағирҙар һәм яҙыусылар ҙа туған тел хаҡында матур әҫәрҙәр ижад итәләр. Бөгөн һеҙҙең менән Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Зәйнәб Биишеваның «Башҡорт теле» шиғыры менән танышабыҙ, тасуири уҡырға өйрәнәбеҙ.

З.Биишева - башkорт әҙәбиәтен үҫтереүгә ҙур көс һалған әҙибә. Ул хикәйәләр, повестар, романдар, драмалар, шиғырҙар яҙа. Бөгөнгө көндә уның әҫәрҙәрен яратып уkыйҙар, сөнки улар тормош, кешеләр, яkшылыk, изгелек тураһында уйларға мәжбүр итә. 1960 йылда, йәғни бынан 50 йылдан артыk элек, яҙылған «Башkорт теле» шиғыры ла һеҙҙе фәһемле һығымталар яһатыр, тип уйлайым.

*Һүҙлек эше ойоштороla.*

*Шунан уkытыусы шиғырҙы тасуири уkый.*

**Уkытыусы:** Шиғыр нимә тураһында? Шағир туған телгә kарата ниндәй тойғоларын еткерә?

**Студенттар:** *З.Биишева башkорт теленә kарата һоkланыу хистәрен еткерә.*

**Уkытыусы:** Хәҙер әҫәрҙе эстән уkып сығығыҙ, уның ниндәй төргә kарағанын әйтегеҙ. (Слайдта шиғыр төрҙәре күрһәтелә: шиғыр-монолог, шиғыр-диалог, шиғыр-өндәшеү).

**Студенттар:** *Әҫәр шиғыр-өндәшеү төрөнә kарай, сөнки лирик герой башkорт теленә мөрәжәғәт итә, уға kылыkһырлама бирә, шуның менән бөтәбеҙҙе лә телгә иғтибарҙы йәлеп итә.*

**Уkытыусы:** Яуабығыҙ менән килешәм. Автор ниндәй һүрәтләү сараларын kуллана? (Слайдта һүрәтләү саралары күрһәтелә).

**Студенттар:** *Шиғырҙа эпитеттар киң урын алған. «Нәфис», «наҙлы», «йомарт», «зирәк» кеүек эпитеттар тел хаkында төптән уйларға мәжбүр итә. Сағыштырыуҙар ҙа үҙенсәлекле. «Моң шишмәһе һандуғастай», «аллы-гөллө гөл сәскәләй», «серле kамыш kурайындай» кеүек тәбиғәткә бәйле образлы һүҙбәйләнештәр тел хаkында көтөлмәгән тос фекерҙәр өҫтәй.*

**Уkытыусы:** Яуабығыҙ дөрөҫ. *Сағыштырыуҙар* һәм эпитеттар шиғырҙы эмоциональ һәм образлы итәләр. Хәҙер шиғырҙың тәүге дүрт юлын уkыйыk, тел хаkында ниндәй фекер еткерелә, шуны билдәләйек.

**Студенттар:** *Лирик герой башkорт телен йырсы тип атай, «нәфис», «наҙлы» тип kылыkһырлай. Бының менән автор башkорт теленең һәр һүҙе матур яңғырай икәнлеген әйтергә теләй. Ә туған телдәге телмәр моңло йырҙы хәтерләтә. Рәссам нисек буяуҙары менән матур картиналар тыуҙыра, беҙ ҙә һүҙ-буяуҙарыбыҙ менән һоkланғыс телмәр тыуҙыра алабыҙ. Шундай телмәрҙә һәр һүҙ нәфис, нәзәкәтле тойола. Башkорт телендәге һүҙҙәр аллы-гөллө сәскәләргә тиң. Яландағы сәксәләр нисек күҙҙең яуын ала, матур яңғырашлы һүҙҙәр ҙә шулай kолаkты иркәләй, наҙлай.*

**Уkытыусы:** Дөрөҫ фекер йөрөтәһегеҙ. Икенсе дүрт юллыkта туған телдең ниндәй сифаттары асыла.

**Студенттар:** *Лирик герой телебеҙҙе Урал тауҙары менән сағыштырып, бай, йомарт булыуын күрһәтә. Ысынлап та, Уралтауҙың ер аҫты һәм ер өҫтө байлыkтары һанап бөткөһөҙ. Башkорттар бына нисә быуат инде башkа халыkтар менән унда һыйынып йәшәй, уның байлыkтарын файҙалана. Телебеҙҙәге һүҙҙәр ҙә ынйы-алтындарға бәрәбәр. Һүҙҙәрҙә күпме аkыл, тәжрибә һаkлана! Халkыбыҙ йыйған аkылын йәштәр менән, башkа халыkтар менән йомарт бүлешә.*

*Лирик герой туған телде «kарт», «олпат» тип kылыkһырлай. Телебеҙ бик боронғо замандарҙа барлыkkа килгән. Юғалмаған, ә, киреһенсә, йылдар үтеү менән олпатланған, уға ихтирам ғына артkан.*

*«Күпте күргән сәсәнендәй йор, зирәк һин» тигән юлдары аша телмәребеҙҙә кешенең аkылын, зиһенен үҫтереүсе һүҙҙәрҙең күплеген күрһәтә, тормоштоң һәр төрлө күренешен дә атаған аҫыл һүҙҙәр бар, уларҙы белеп, оҫта, төҙөк телмәр төҙөгәндә, тормош һынауҙарын бирешмәйсә үтергә була. Сәсәндәр - туған телдең бөтә нескәлектәрен белгән ижадсылар, ил ағалары. Улар ир-егеттәрҙе, kатын-kыҙҙарҙы иркен тормошта матур йәшәргә, азатлыkты яуларға көрәшкә әйҙәгән, балаларҙың күңелен үҫтергән, илһамландырған. Телебеҙ ҙә шундай kөҙрәткә эйә тигән һығымта яһайбыҙ.*

**Уkытыусы:** Яуаптарығыҙ kыҙыkлы. Шиғырҙың һәр юлы буйынса ла әллә күпме һөйләшергә була, шулай бит!? Өсөнсө строфа тәүгеләренән төҙөлөшө менән айырыла. Һөйләмдәрҙе иғтибар менән уkығыҙ. Телдең тағы ниндәй сифаттары асыла икәнен әйтегеҙ.

**Студенттар:** *Был һуңғы строфала телдең диңгеҙ тәрәнлегенән күпкә тәрәнерәк, ай-көн матурлығынан күпкә гүзәлерәк, бейек kаяларҙан күпкә бөйөгөрәк икәнлеге күрһәтелә. Беҙ телмәребеҙ аша тәрән мәғәнәле, тос фекерҙәр еткерә алабыҙ. Ошондай оҙайлы тарих кисергән., халkыбыҙҙың күңелен нурландырған бай һәм гүзәл тел генә бөйөклөккә эйә.*

**Уkытыусы:** Лирик герой башkорт теленә ниндәй һүҙҙәр менән өндәшә?

**Студенттар:** «*Илһамлы», «kәҙерле», «һөйөклө», «мәрхәмәтле» тип ололап өндәшә. Лирик герой телгә kарата иң матур хистәрен еткерә.*

Уkытыусы: Уның башkорт теле хаkындағы фекерҙәре менән килешәһегеҙме?

**Студенттар:** *Килешәбеҙ. Шиғыр туған тел хаkында уйлата, уны kәҙерләргә, хөрмәт итергә саkыра.*

**Укытыусы**: Беҙ һеҙҙең менән башkорт теле хаkында лирик геройҙың уйҙары менән таныштыk. Хәҙер лирик геройҙың үҙенә kылыkһырлама бирәйек.

**Студенттар:** *Ул - туған телен ысын йөрәктән һөйөүсе, тарихын, мәҙәниәтен белеүсе, ошо телдә һөйләшеүе менән ғорурланыусы юғары күңелле кеше. Ундай кешеләр хөрмәткә лайыk.*

**Укытыусы:** Лирик геройға оkшаған кешеләр беҙҙең заманда бармы икән?

**Студенттар:** *Иң беренсе ошо әҫәрҙе ижад итеүсе шағирә З.Биишева күҙ алдына баҫа. Шулай уk яҙыусыларҙы, журналистарҙы, уkытыусыларҙы, оҫта итеп туған телдә һөйләшеүсе замандаштарыбыҙҙы миҫал итеп килтерергә мөмкин.*

**Укытыусы:** Ә һеҙ телгә ошолай мөрәжәғәт итергә әҙерһегеҙме.

**Студенттар:** *Телде kәҙерләргә кәрәк икәнен яkшы аңланыk. Сөнки телдең киләсәге беҙгә бәйле бит. Шулай ҙа үҙебеҙҙе лирик герой һымаk өндәшергә батырсылыk итә алмайбыҙҙыр, был - оло яуаплылыk.*

**Укытыусы:** Иң мөһиме - туған телгә битараф булмайыk, уны kәҙерләп һаklайыk, нескәлектәрен өйрәнәйек. Әҫәр һеҙҙә тел хаkында ниндәй хистәр уятты?

**Студенттар**: *Һokланыу, ғорурланыу тойғоларын уятты.*

**Укытыусы:** Артабан шиғырҙы һokланыу, ғорурланыу тойғоларын еткерерлек итеп тасуири уkырға өйрәнәйек. Бының өсөн тасуири уkыу сараларын иҫкә төшөрәйек.

(Слайдта тасуири уkыу саралары күрһәтелә. Пауза, баҫым һүҙҙәренә аңлатма бирелә.)







**Укытыусы:** интонация саралары араһынан беҙ пауза һәм баҫымдар хаkында һөйләшәбеҙ. Тәүҙә шиғырҙа паузаларҙы билдәләйек.

**Студенттар**: *Әҫәрҙә тыныш билдәләре булған урында пауза яһала.*

**Укытыусы:** Хәҙер, һеҙҙең дөрөҫ билдәләгәнегеҙҙе тикшерер өсөн, аудиояҙма тыңлайыҡ. Шиғырҙы Башҡортостандың халыҡ артисткаһы Н.Ғәләүетдинова уҡый. (Аудиояҙманан шиғырҙы тыңлау).

**Студенттар:** *Диктор паузаны тағын да тәүге ике строфала сағыштырыуҙарҙан һуң яһаны. Былар - ҡыҫҡа паузалар.*

***Укытыусы:*** Дөрөҫ иғтибар иттегеҙ. Тасуири уҡыр өсөн һүҙ баҫымын, логик баҫымды дөрөҫ ҡуйырға кәрәк. Тәүҙә бергәләп һүҙ баҫымы буйынса ҡағиҙәне иҫкә төшөрәйек.

**Студенттар:** *Башҡорт телендә һүҙ эсендә баҫым аҙаҡҡы ижеккә төшә.*

**Укытыусы:** Дөрөҫ. Ләкин ҡайһы бер һүҙҙәрҙә баҫым алдағы ижеккә лә төшә. (Слайдта күрһәтелә). Һүҙҙәр хәбәрлек категорияһы (шатмын), юҡлыҡ аффикстары (һунлама) ялғауҙарын ҡабул иткәндә, һорау киҫәксәләре (килдеме) һәм дай/-дәй ялғаулы һүҙҙәрҙә (тауҙай) баҫым ошо аффикстар алдындағы ижеккә төшә. Хәҙер шиғырҙағы һүҙҙәргә күҙәтеү яһайыҡ. Һүҙҙәр баҫымын билдәләйек.







**Студенттар:** *Тимәк, «Һандуғастай», «Уралыңдай» тибындағы сағыштырыуҙарҙа, «тиңләмәйем», «тәрәнһең», «гүзәлһең», «бөйөкһөң» һүҙҙәрендә баҫым күрһәтелгән аффикстар алдындағы ижеккә төшә.*

**Укытыусы:** Дөрөҫ. Хәтерҙә ҡалдырыр өсөн, был һүҙҙәрҙе хор менән ҡабатлайыҡ. (Хор менән уҡыу) Артабан тәүге ике дүрт юллыҡтан логик баҫымлы һүҙҙәрҙе табайыҡ.

(Студенттар төрлөсә уҡып ҡарайҙар)

**Студенттар**: *Беҙҙенсә, эпитеттарға - уртаса баҫым, сағыштырыуҙарҙы белдергән һүҙҙәргә көсһөҙ баҫым төшә. Сөнки ошолай уҡығанда, авторҙың фекере яҡшыраҡ асыла. Ике строфаның аҙаҡҡы юлдарын көслө баҫым менән уҡыйбыҙ. Был юлдарҙа башҡорт теленә оло хөрмәт менән өндәшәбеҙ.*

**Укытыусы**: Аудиояҙманы тыңлағыҙ һәм үҙ-үҙегеҙҙе тикшерегеҙ. (Аудиояҙма буйынса тәүге ике строфаны тикшерәләр). Хәҙер өсөнсө

строфаны тыңлайыҡ, диктор ниндәй һүҙҙәрҙе баҫым менән уҡығанын билдәләп барайыҡ. (Өсөнсө строфаны тикшереү, баҫымдарҙы диктор уҡығанса билдәләү). Шулай итеп, шиғырҙың партитураһын төҙөнөк. Тикшерегеҙ. (Слайдта сыға)

**Уҡытыусы**: Партитураға нигеҙләнеп, шиғырҙы тасуири уҡырға әҙерләнәйек.

*Артабан эш ошо тәртиптә ойошторола:*

1. Шиғырҙы уҡытыусы тасуири уҡый.
2. Бер юлды - уҡытыусы, икенсе юлды студенттар хор менән уҡый
3. Ике юлды - уҡытыусы, икенсе ике юлды студенттар хор менән уҡый.
4. Аудиояҙма тыңлау, студенттар дикторға эйәреп шыбырлап уҡый.
5. Аудиояҙманың беренсе строфаһын тыңлау, пауза мәлендә студенттар хор менән уҡый. (Ҡалған строфалар менән дә шундай уҡ эш алып барыла)
6. Парҙар менән эшләү. Студенттар бер-береһенә уҡып күрһәтәләр, кәңәштәрен әйтәләр.





7. Теләүселәр шиғырҙы төркөм алдында уҡый. Иптәштәре баһалай, хаталарын төҙәтә, уңышлы урындарын күрһәтә.



*Ошо эштәр аҙағында яҡшы уҡыусылар, дәрестә әүҙем ҡатнашыусылар баһалана.*

**Уҡытыусы:** Дәресте тамамлайбыҙ. Бөгөн З.Биишеваның «Башҡорт теле» шиғырын өйрәндек.Үҙебеҙгә ниндәй яңылыҡтар астыҡ?

**Студенттар:** *З.Биишева – башҡорт телен ысын күңелдән һөйгән, уның бөтә нескәлектәрен белгән шағирә. Шундай шәхестәр булған өсөн дә туған тел юғалмай. Ул ихтирамға лайыҡ бөйөк кеше. Эпиграфтағы мәҡәлде үҙгәртеп әйтһәк, «Туған телен ҡәҙерләгән кеше ҡәҙерле булыр» килеп сыға. Был һүҙҙәр нәҡ шағирә хаҡында һымаҡ. Шулай булғас, беҙҙең халыҡты хөрмәт итһендәр өсөн, иң беренсе телебеҙҙе ҡәҙерләргә кәрәк.*

**Уҡытыусы:** Дөрөҫ һығымта яһанығыҙ. Мин һеҙгә хөрмәткә лайыҡ кешеләр булып йәшәүегеҙҙе, ҙур уңыштарға ирешеүегеҙҙе, туған телебеҙҙе онотмауығыҙҙы теләйем. Һау булығыҙ!

## Ҡулланылған әҙәбиәт:


1. Аслаев Т.Х. Башланғыс мәктәптә тасуири уҡырға һәм һөйләргә өйрәтеү. - Өфө. 1981.-255 б.
2. ҒәбитоваЗ., Таһирова С.А.. Башҡорт теле: башҡорт теле дәүләт теле итеп уҡытылған башланғыс һәм урта прфессиональ белем биреү учреждениларының 1 курс студенттары өсөн дәреслек. - Өфө: Китап, 2009.-192б.
3. Әхмәтйәнов К. Әҙәбиәт теорияһы. - Өфө: Китап, 2009.-192б.
4. Псәнчин.В.Ш. Телдең күркәмлек саралары. -Өфө.: Башкортостан «Китап» нәшриәте, 2003.-192 б.
5. Усманова М.Г.Грамматика башкирского языка в таблицах и схемах (с пояснениями). –Уфа: Китап, 2007, - 112 с.